1

## Брагин ташы

/Риуаят/

Бынан ике йөҙ йылдан да элек Оронборҙан бер кнәз был Әмин ауылына килеп утырған. Брагин был ауыл эргәһендәге тауҙа таш актарткан. Әминде шунан һуң таш ауылы тип йөрәткәндәр.

Ә ул сакта ауылдар батырҙар исеме менән аталған: Темәс батыр исеменә- Темәс, Таһир батыр исеменә- ауылдың яртыһы- Таһир, яртыһы Нурғәле тип йөрәтелгән. Батырҙар үҙҙәренең исемен биреү өсөн һәнүз тартышып торғандар. Бүтән ауылдарҙа ла шулай булған элек.

Беҙҙең ауылдың батыры инде Әмин булған. Әмин бик тә кеүәтте, бик тә зиһенде, бик тә мәргән атыусы булып, тирә якка даны сыккан.

Аның тураһында был вакиға алты быуынға һөйҙәлеп килгән хәл.

Брагин килеп, был тирәлә үҙенең коралданған утыҙ һалдаты менән йөрөгән. Якындағы анау тауҙан бәғзе кешеләрҙән таш сығарткан, бәғзеләренән кирбес һуктырған. Үҙенең тимерлегендә лә кешеләр тоткан, балталар эштәткән. һәр эштәлгән балтаны ташка саптырып карата икән. Әгәр балта йәнселһә, эштәүсенең башын киҫә. Әнә Әмин сабып калдырған ак таш һаман да әле ята тыкырыкта. Күрҙегеҙме, өс әҙе калған балтанан. һай, кеүәт тә булған шул үҙендә! Калай тәрән бит урындары! Ана теге тауҙағы Әмин актарған таштар кубә-кубә булып ата. Әмин сығарған ҙур бер акташ бар анда. Аня әҙәм түгел, машинаң да күтәргеһеҙ. Ташты

бит ул күтәргән дә аҫтына икенсе бер ташты кыҫтырып, күтәртеп куйған. Иҫ китерҙек инде , уйҙап карағаң! Шундай ҙа көс булыр икән!

Брагин инде әнә шул сығарылған такта таштарҙы урамдан аттар үткән сакта дағаларынан ут сығып торһон тип, урамдарға, юлдарға түшәтер өсөн Оромборға оҙаттырған икән.

Бөтә ауыл халкы Брагиндең канһыҙлығынан, катылығынан кан илаған. Брагиндең рөхсәтенән башка егет кәләш йәрәшергә, кыҙ кейәүгә сығырға ла тейеш түгел. Әгәр ҙә егет кәләш йәрәшһә инде, Брагин үҙе тәүге өс төндә кыҙ менән үткәрә. Кем дә кем каршылашып, бер ауыҙ һүҙ әйтә икән, эше уңдан түгел: һүҙ тейҙергәндең башы сабып өҙөлә. Үҙенең бер духтыр мәрйәһе лә була. Ул мәрйә Брагин менән кыҙҙың куныр алдынан, аның кыҙ булыуын- булмауын, сирле-фәлән түгелме икәнлеген тикшереп йөрөгән.

Брагин Әмин батырҙың йәрәшәсәк кәләшен дә шулай мыҫкылдарға ниәт итә. Брагин бигерәк тә Әмингә үс һактап йөрөгән була. Әмин үҙенең халкын уның кулы аҫтынан һәнүз аралап сыға торған булғанға, Әминде ул юк итергә һылтау ғына көсәп йөрөгән. Әминдең Брагингә килеп еткән һәр бер һүҙе уның канын кыҙҙырған. Тик ул үҙенә каршы Әминдең халкты күтәреүенән куркып торған һәр сак.

Брагиндең кылған был яуыҙлыктарына халктың асыуы сығырынан сыккан, ләүкеп китергә торған ут һымак торған. Әмин ба тыр халкының был хәленә бик намыҫтан

ған. Мнде түҙер әмәл калмағас, Әмин ус алыу өсөн уңайҙы вакытты һайҙай, Брагинде юк итергә йыйына.

Брагин, яҙғыһын өйрәктәр уйыны баштағас, Ирәндек буйында яткан Талкаҫ күленә һунарға йөрөй торған була. Әмин үҙенең дуҫ-иштәре менән Брагиндең һунарға килеүен аңдып, Талмаҫ ситендәге камыштар араһында ята. Брагин якшы юрғалар ектереп, кәмә алып, Талкаҫка килә. Килеп, кәмәгә ултырып, камил Талкаҫтың уртаһына еттем тигәндә, Әмин камыштар араһынан яр ситенә атыла.

Талкаҫтың уртаһында һаман да әле бер утрау бар. Брагин әнә шул утрауҙа коштар атып, балык бешереп, күңел аса икән. Әминдең йән дуҫы Сураш уға былай ти:

- Кәмәгә атып, төбөн уйып, Брагинде тонсоктороп үлтерәйек,- ти ҙә Сураш атып ебәрә- кәмә төбө уйылып, һыу тула башлай. Тегеләр утрауға сак-сак кына сығып калалар. Сығып етеүҙәре була, Әмин үҙе асырғанып тырып, йәйәһенең каты керемен зыңкытып тартып ебәрә-ук һыҙғырып барып, туптура Брагиндең күкрәген тишеп сығып, кәмәһен актарып ебәрә. һыңар аяғын да ярға баҫырға өлгөрмәй калған Брагин колап китә. Бата баштағас та бармағындағы балдағын һурып алып, һыуға таштай- кинәнмәһендәр, ти инде. Теге духтыр мәрйә генә шунда нисектер касып котола. Был хәлде ул Оронборға барып еткерә, тиҙәр. Брагиндең балдағы аңа әбей батша тарафынан исеме яҙып бүләк ителгән алтын балдак була. Шул исемде алтын балдак Ирәндек арьяғындағы Яукүлдә йылымға эләккән бер суртан эсенән килеп килеп сыккан: Талкаҫ менән Яукүл Ирәндек аҫтынан тоташып ята икән шул әнә.

Был тирәнең халкын Әмин батыр шулайтып казанан көткара. Үҙенең йәндәй һөйгән кәләшенең дә намыҫын һактап кала. Аҙактан ул кәләш менән касып сығып китә, Стәрле яктарына. Шул китеүенән китә, кайтмай ғәйеп була.

Халк Брагинденең өйөн, ғәскәрен туҙҙырып, ул утырған урынды һөрөп ташлап, яуыздың үҙе түгел, эҙе лә калмаһын тип, зират эштәп, саукалар үҫтереп ебәрә. Хәҙер әле шул урынды казғанда нигеҙ таштары, кирбестәр, бүрәнә, такта серектәре килеп сыға.

Аҙак батшанан килеп һорашып йөрәһәләр ҙә бер кем бер ауыҙ һүҙ ҙә әйтмәгән. Әле беҙҙең заманда ла зимскей килеп:

- Темәстәге кнәз кайҙа булған?- тип һорашып йөрөнө. Халык күрмәне лә белмәне,лә.Әйтерһең Брагин доньяла булмаған- зимскейҙең һүҙен колакка ла элмәне.Хәҙер әнә Әмин сығарған ак таштар кәбәндәй булып ята.Өй артында әнә Әмин сығарған, үҙе балта сабып калдырған акташ ята.Ул акташ туҙмай ҙа, серемәй ҙә.Халыктың нәфрәте лә, хәтере лә шулай әнә. һаман онотолмай ата-бабаның күргәне. Кәм тигәндә лә хәҙер быға бер ике йөҙ йылдан да ашыу барҙыр инде.Хәҙер бит алты быуын: Әмин-бер,Мөхәммәт- ике,Назар- өс,Үтәмеш- дүрт, Фатих- биш, Ниғмәталты.Ниғмәттән тыуған Әшәрәф.Әшәрәфтең үҙ ауыҙынан ишеттем мин. Ә Ниғмәт үҙе йөҙгә етеп үлгән ул. Иң кәме тигәндә лә шул ике йөҙ йылдан артык вакыт үткән.

Шулай булған, болдар, был хәл. Ни белгәм, ни ишеткәм, шуны ишеттерҙем үҙегеҙгә. Белмәгәнде һөйҙәр хәл юк.Кырын утыр, туры һөйҙә,тигәндәр бит.

Легенданы Баймак районының Әмин ауылында йәшәүсе 73 йәшлек [illegible] улы Ғәлим [illegible] һөйләгән 1952 йылдың 31 июлендә яҙып алдым.